***Әнисә ТАҺИРОВА***

# Ҡояшлы моң онотолмай

...Һарына беҙгә һары алтын булды,
Май айында етте балтырған.
Беҙ шуларҙы юллап, урмандарҙа
Мәте кисеп үттек балтырҙан.

...Беҙҙең әле ҡырыҫ күңелдәрҙән
Өлгөрмәгән һағыш таралып.
Үҫкән саҡта беҙ ҡояшҡа түгел,
Ҡара ергә күберәк ҡараныҡ.



*Сафуан Әлибаев*

Һағышлы ла, моңло ла ине Сафуан Әлибаевтың шиғырҙары. Үрҙә килтерелгән шиғыр юлдарында, Сафуан, әйтерһең дә, барлыҡ һуғыш балаларының яҙмышын дөйөмләштереп биргән. Был юлдарҙы уҡығанда күңелде хәтирәләр ҡамай, йөрәкте юғалтыуҙар көйҙөрөп үтә. Эйе, юғалтыуҙар... Беҙҙе әҙәбиәт юлына илткән, әйҙәгән, ижад серҙәрен, нескәлектәрен асҡан оло быуын яҙыусыларын, шағирҙарын, инде килеп 60-сы йылдарҙа шаулап-гөрләп әҙәбиәткә килгән һуғыш осоро балаларын бер-бер артлы юғалтыу һағышы...

Аслыҡ, яланғаслыҡты күреп үҫкән, тормош һынауҙарын үтеп килгән был быуын шағирҙары башҡорт әҙәбиәтен, башҡорт шиғриәтен яңы бейеклеккә күтәрҙе. Улар, әҙәбиәткә эскерһеҙ, ихлас хеҙмәт итеүсе, талантлары Хоҙай тарафынан инселәнгән шағирҙар, бер-бер артлы баҡыйлыҡҡа күсә бара. Вафа Әхмәҙиев, Рауил Ниғмәтуллин, Самат Ғәбиҙуллин, Ҡадир Әлибаев, Мөхәммәт Илбаев... Улар артынан Сафуан Әлибаев та китеп барҙы. Һуғыш осоро балалары әҙәбиәткә йөрәк ҡушыуы буйынса хеҙмәт итте, дан-шөһрәт артынан ҡыуманы, юғары исем өсөн даулашып йөрөмәне. Йөрәккә ҡан һауҙырған юғалтыуҙар... Улар менән бергә күпме һуҡмаҡтарҙы үттек, күпме осрашыуҙар шатлығын бергә кисерҙек, шиғриәттең күпме серҙәрен бергәләп астыҡ.

60—70-се йылдарҙа әҙәбиәт донъяһы иҫ китмәле әүҙем тормош менән йәшәне. Беҙ уҡыған Стәрлетамаҡ педагогия институтының “Ашҡаҙар” әҙәби түңәрәге ағзаларын Өфө университетының “Шоңҡар” түңәрәге ағзалары менән ысын дуҫлыҡ ептәре бәйләй ине. Ул ваҡыттағы әҙәбиәт кисәләре, халыҡ шығырым тулы залдар яҡты бер төш һымаҡ иҫтә ҡалған. Ә бит тормошобоҙ ул йылдарҙа ла бик үк еңелдән

түгел ине. Хрущев етәкселек иткән йылдарҙа кукуруз икмәгенә сәғәттәр буйына сиратта тороуҙар иҫкә төшә. Ләкин шиғыр кисәләре булған көндәрҙә барлыҡ хәсрәттәр юҡҡа сыға, студенттар кисәгә әҙерләнә башлай. Шиғыр кисәһенән һуң Сафуан, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарып, бар халыҡты әсир итә, күпме ҡыҙҙарҙы төн йоҡоһонан яҙҙыра торғайны. Мин "Башҡортостан ҡыҙы" журналында эшләгән осорҙа Сафуан "Башҡортостан пионеры" гәзите мөхәррире ине. 1968 йылда уның балалар өсөн "Беҙҙең юлдаш — яҡты ҡояш" тигән китабы донъя күрҙе. Тәүге ижад емешен ул түбәндәге автограф менән бүләк итте: "Әнисәгә, ҡояшлы юлдар теләп, С.Әлибаев. 14.02.1968". Сафуан менән икебеҙ ҙә бер осорҙа, 1973 йылда, Яҙыусылар союзы ағзаһы булдыҡ. Ул йылдарҙа Яҙыусылар союзында тормош ҡайнап тора, Башҡортостандың төрлө райондарында әҙәби осрашыуҙар йыш була ине. Шиғыр кисәләрендә Сафуанды сәхнәнән оҙаҡ ебәрмәйенсә, алҡыштарға күмеп ҡат-ҡат йырлатыуҙары беҙҙең өсөн ғәҙәти бер күренеш ине.

Сафуан Әлибаев балалар өсөн дә, ололар өсөн дә әүҙем ижад итте. "Ҡойон" тигән китабы өсөн уға республиканың Ғ.Сәләм исемендәге премияһы бирелде, ә 1996 йылда "Тылсымлы шар" китабы өсөн Андерсен исемендәге Халыҡ-ара дипломға лайыҡ булды. Совет осоронда яҙыусыларға ҡарата иғтибар менән бергә сикләнгән ҡанундар булыуына ҡарамаҫтан, Сафуанға күп ерҙәрҙә булыу, хатта сит илдәргә сығыу бәхете лә тейҙе. 1984 йылда Германияла булып ҡайтҡандан һуң ул башҡорт шағирҙарының немец телендә баҫылып сыҡҡан китабын миңә бүләк итте. 59 башҡорт шағирының шиғырҙары тәржемәләнгән был китапҡа минең "Башҡортостаным" шиғырының тәүге юлын дөйөм исем итеп алғандар. Уны рус теленә Мәскәү шағиры Егор Самченко тәржемә иткәйне. Сафуан был иҫтәлекле китапта түбәндәге автографын ҡалдырған: "Әнисәгә. Алыҫ юлдар иҫтәлеге итеп, ижади уңыштар теләп, Сафуан Әлибаев. 21.05.1984". Сафуан Әлибаев менән иң иҫтәлекле сәфәрҙәрҙең береһе үткән быуаттың аҙағында ут күршебеҙ Ҡазан тарафтарына булды. Татарстан китап нәшриәтендә икебеҙҙең



дә китаптарыбыҙ донъя күрергә тейеш ине. Саҡырыу ҡағыҙын алыу менән тиҙ генә йыйынып юлға сыҡтыҡ. Беҙ туҡтаған ҡунаҡханаға кисен бик күп татар яҙыусылары килеп тулды. Шунда мин Татарстанда ла Сафуандың ижадташ дуҫтары күп булыуына, күршеләрҙең дә мөкиббән китеп башҡорт йырҙарын тыңлауына хайран ҡалғайным. Осрашыуға, ни сәбәптәндер, минең китапты тәржемәләү һәм донъяға сығарыу буйынса бик күп эш башҡарған, телефон һәм хат аша һәр саҡ бәйләнеш тотҡан Харрас Әюп килә алманы. Ҡыҙғаныс, китабымдың мөхәррире менән бер тапҡыр ҙа осрашырға тура килмәне, тиҙҙән ул яҡты донъяларҙан китеп барҙы.

Юғалтыуҙар, юғалтыуҙар... Мин бала сағымда икмәк төҫөн бик һирәк күргән, серек бәрәңге, ҡаҡы, йыуа, һарына ашап иҫән ҡалған, иң ауыр ваҡыттарҙа ла кешелек сифаттарын юғалтмаған, олоһона ла, кесеһенә лә ихтирамлы булып ҡала белгән һуғыш осоро балаларына бик тә рәхмәтлемен. Минең менән бер осорҙа әҙәбиәткә килгән быуын сағыу талантлы ине. Әҙәбиәт улар өсөн йәшәү рәүеше, күңел талабы булды, әйтеп китеүемсә, улар дан артынан ҡыуманы. Сафуан Әлибаев та ана шундай әҙәпле, кеселекле, күңел матурлығына, донъя йәменә мөкиббән киткән яҡты рухлы шәхес ине. Быйыл февраль айында уға 75 йәш тулған булыр ине. Ләкин элек-электән сағыу таланттарға, нишләптер, сағыу байрамдар һирәк эләгә. Һөрөмлө, ҡара йылдарҙа баш ҡалҡытҡан, ҡара ергә ҡарап үҫкән был һуғыш балаһының күңеле лә, ижады ла яҡты, ҡояшлы булды. Ә ҡояшлы моң онотолмай. Түбәндәге шиғырым оҙайлы йылдар дауамында бер һуҡмаҡтан атлаған йәштәшем, талантлы шағир киткән рух донъяһы тарафтарына тере бер нур, моң булып барып етһен.

## Онотолмай

*Сафуан Әлибаевтың яҡты иҫтәлегенә*

Мин яңынан үткәндәргә ҡайтам,
Хәтер шишмәләре аға тынмай.
Һуғыш балалары уҙған юлдар
Онотолмай, һаман онотолмай.

Әйләнәм дә үткәндәргә ҡайтам,
Уйҙар көмөш ҡыңғырауҙай сыңлай:
Йомшаҡ ҡына баҫып килеүҙәрең,
Шиғыр сылбырҙарын һүтеүҙәрең
Онотолмай, һаман онотолмай.

Моңһоуланып үткәндәргә ҡайтам,
Яҡты хәтирәгә туҙан ҡунмай.
Сағыу кисәләрҙә йырың менән
Әсир итеүҙәрең онотолмай.

Йылдар аша үткәндәргә ҡайтам,
Уртаҡ сихри моңдар йәнде нурлай.
Алсаҡ йөҙөң, ихлас йылмайыуың
Онотолмай, һаман онотолмай.

*Ғинуар, 2016.*